Хөрмәтле ауылдаштар! Сәк ырылған етәкселәр!

Һеҙ ҙ ең иғтибарығыҙ ға Кейекбай ауыл Советы һәм ауыл хакимиәтенең 2016 йылдағы эшмәкәрлеге тураһында отчетын тәк дим итәм.

Кейекбай ауыл Советында Уставк а ярашлы 7 депутат эшләй. Ауыл Советының 11 ултырышы үтте. Был ултырыштарҙ а 45 к арар к абул ителде. Ауыл биләмәһе Уставына үҙ гәреш индереү, төҙ өлөш проектының урындағы нормативтарын раҫ лау,ерҙ әргә аренда хак ын билдәләү, ауыл биләмәһендә малдарҙ ы к ыуыу һәм көтөү тураһындағы положениены раҫ лау, депутаттарҙ ың килем, сығымдары, мөлкәттәре тураһында нигеҙ ләмә, экологик өмәләр, к ый сығарыу, ауыл биләмәһен йәшелләндереү, халык дружиналары положениеһы, уларҙ ың Уставы раҫ ланды, район Советы һәм хакимиәте, милек һәм мөлкәт менән идара итеү комитеты менән килешеүҙ әр раҫ ланды, милек һалымына үҙ гәрештәр индереү , 2017 йыл, 2018-2019 йылдарҙ ың планлы осорона бюджет һәм башк а һорауҙ ар к аралды.

2016 йылда ауыл хакимиәтенең 129 к арары, 63 бойороғо әҙ ерләнде. 417 хат килгән, 301 хат ебәрелгән.

Ауыл хакимиәтенә 1 кеше торлак шарттарын як шыртыуҙ ы һорап, 10 ғариза хакимиәттә эшләгәндәрҙ ән, 8 кешенән яҙ ма мөрәжәғәт, улар ауылда законһыҙ спиртлы эсемлектәр һатыу буйынса, урамдарға як тыртк ыстар к уйыу, һыу колонкалары, Ағиҙ ел йылғаһының ярын нығытыу, ауылдағы бәйһеҙ эттәр тураһында булды. Төрлө справкалар һорап 1224 кеше мөрәжәғәт итте, 63 кеше мал һатырға справка алды, 196 кеше хәрби иҫ әптә тора, шуның 10-һы к атын-к ыҙ , 11 кеше учетк а торған, 1 учеттан төшкән.

2016 йылда ауыл хакимиәтенә 23 кешенән ер схемаһын раҫ лау, 30 кеше өй һалырға ер һорап, 7 ғариза ерҙ е хосусилаштырыу буйынса, 1 ғариза ерен ҙ урайтыу, 12 ғариза льгота буйынса ер алыу, 28 кеше ауыл хужалығы ерҙ әренә ғариза яҙ ҙ ылар. Морат туғайында 19 арендатор эшләй. 2016 йылда уларға 314032,30 һум аренда хак ы иҫ әпләнде, 89487,9 һум йыйылып еткерелмәгән. 3 ер участкаһы аукцион аша к уртымға бирелде.

7 дөйөм йыйылыш үтте. Был йыйылыштарҙ а экологик өмәләр, ауылдарҙ а пожар хәүефһеҙ леге, көтөү ойоштороу, халык дружиналарын булдырыу, район башк орт к оролтайына делегаттар һайлау кеүек мәсьәләләр к аралды.

Торлак шарттарын як шыртыу буйынса 32 кеше иҫ әптә тора, шуларҙ ың 8-ҙ е күп балалы ғаиләләр, 7-һе мөмкинлектәре сикләнгәндәр(инвалидтар), 6-һы йәш ғаилә, 6-һы локаль һуғыштарҙ а к атнашыусылар. 2016 йылда 10 яңы өйгә, 9 алдан йәшәп ятк ан өйҙ әргә документ эшләнелде һәм кадастровый учетк а к уйылды.

174 кеше пай ерҙ әрен шәхси милек итеп таныҡ лык алды. 11 кеше баш тартып ғариза яҙ ҙ ы, к алған 54 кешенең к айһылары мәрхүм булды, к айһыларының ере өлөшлө милектә тора.

ДЕМОГРАФИЯ

Кейекбай ауыл биләмәһендә 2016 йылдың 1 ғинуарына ҡ арата 965 кеше иҫ әпләнде. 275 хужалыҡ (Кейекбайҙ а -87, Гәҙ елгәрәйҙ ә-150, Мәндәғолда-36, Аҡ булатта-1). Күп балалы ғаиләләр һаны -41, мөмкинлектәре сикләнгәндәр (инвалидтар) 44, шуларҙ ың 8-ҙ е балалар. 4 тыл ветераны йәшәй, шуның берәүһе Бөйөк ватан һуғышы ветеранының тол ҡ атыны.

2016 йылда 14 сабый тыуған. Кейекбайҙ а -6, Ғәҙ елгәрәйҙ ә-7, Мәндәғолда -1. 2015 йыл менән сағыштырғанда 2 балаға күберәк. 8 кеше донъя ҡ уйған, тәбиғи үҫ еш 6.

Ауыр ғаиләләр һаны -2. 2017 йылдың 1 ғинуарына ҡ арата ауыл биләмәһендә 125 пенсионер. 44 хеҙ мәт ветераны иҫ әптә.

2016 йылдың 1-се июленә ҡ арата мал һанының иҫ әп алыу һөҙ өмтәһе буйынса ауыл биләмәһе хужалыҡ тарында бөтәһе:

271 ғаиләнең 177 хужалығында 819 баш эре мөгөҙ лө мал
331 баш һыйыр малы
68 хужалыҡ та 143 баш ат малы
1130 баш һарыҡ , 87 баш - кәзә
1353 баш ҡ ош-ҡ орт
110 хужалыҡ та 1002 оя бал ҡ орто иҫ әптә тора

БЮДЖЕТ

Кейекбай ауыл биләмәһе 2016 йылға килем буйынса планды 103,7%-ҡ а үтәне. (2 580 929,92 һумға). Шул иҫ әптән үҙ килем 112,2% тәшкил итте.(854 918,02 һум) Айырым хужалыҡ тарҙ ан мөлкәт һалымы 93.9 % (7089,54 һум), ер һалымы 80.6%-ҡ а (54 597,4 һум) үтәлде, ойошмаларҙ ан ингән ер һалымы 97,5 (139 347,31 һум) тәшкил итте. Ауыл биләмәһенең арендаға бирелгән ерҙ әренән килгән килем 124,5 %, 413 806,38 һум тәшкил итте. Мөлкәт һатыуҙ ан килгән килем:

1. Мөлкәттән 100 % (73 250 һум).
2. Ер участкаһынан 105 % (66 268,48 һум)

Нотариал хеҙ мәте күрһәтеүҙ ән 11 200 һум килем алынды.

Кейекбай ауыл хакимиәтенең 2016 йылға ҡ абул ителгән бюджеты 2 595 988,86 һумға статьяларға ярашлы тотонолдо:

- 144600 һум ер, транспорт, милек һалымы өсөн түләнде,
- 1600 госпошлина
- 5 094,54 һумға машинаға страховка, техосмотр үткәрелде
- 30131,53 һум телефон бәйләнеше һәм интернет өсөн түләнде
- 2400 һум оргтехникаға (картридж заправит ителде) тотонолдо
- 55595,2 һум ГСМ (бензин) өсөн
- 15000 һумға автомобилгә запчасть алынды

- 9600 һумға хакимиәткә утын алынды
- 10000 һум концеляр тауарҙ арға тотонолдо
- 51971,75 һум ауыл эсендәге юлдарҙ ы ҡ арҙ ан таҙ артыу өсөн түләнде
- 24 400 һум төрлө программаларҙ ы яңыртыу, сертификат алыуға, электрон подпись эшләтеүгә түләнде;
- 2563,66 һум администрацияға тотонолған электр энергияһына түләү өсөн
- 4947,74 һумға газета-журналдарға яҙ ылдыҡ
- 47 473,35 һум урамдарҙ ы яҡ тыртыу өсөн тотонолдо
- 10000 һум пожар хәүефһеҙ леге буйынса тотонолдо (Мәндәғол ауылына емкость)
- 7979,99 һумға ер участкалары үлсәтелде
- 10553 һумға утынлыҡ , гараж өсөн профнастил алынды
- 25900 һум экология буйынса проект документтары эшләтеүгә күсерелде
- 6500 һум эколгия буйынса уҡ ыуға түләнде

2016 йылда **республика бюджетынан** ауылдарҙ ы төҙ өкләндереү өсөн 500 мең һум күләмендә ауыл биләмәһенә аҡ са бүленде.

- Шул аҡ саның 101619,7 һумы урамдарҙ ы яҡ тыртыу өсөн электр энергияһы сығымдарын ҡ аплауға тотонолдо;
- 150000 һумға Кейекбай һәм Мәндәғол ауылдарының урамдары төҙ өкләндерелде, таш түгелде, торба һалынды.
- Ауылдарҙ ағы урам лампаларын ремонтлау өсөн 79357 һум тотонолдо
- 50000 һум урамдарҙ ы ҡ арҙ ан таҙ артыуға тотонолдо
- 14800 һумға аншлаг эшләтелде (ауыл биләмәһе сигендә ҡ уйылды)
- Ғәҙ елгәрәй ауылында зыяратты ремонтлау өсөн 40000 һум, Кейекбай ауылына 3223 һум тотонолдо

Ауыл хужалығы, бәләкәй эшҡ ыуарлыҡ

Ауыл биләмәһендә 4 фермер хужалығы, 10 шәхси эшҡ ыуар иҫ әпләнә. Бөтәһе 8 магазин эшләй, шуның 2-һе яуаплылығы сикләнгән “Шулгән” ойошмаһыныҡ ы.

Мәғариф

Ауыл биләмәһендә Кейекбай башланғыс мәктәп-балалар баҡ саһы, Мәндәғол башланғыс мәктәбе, Ырғыҙ лы урта мәктәбенең Ғәҙ елгәрәй филиалы, Ғәҙ елгәрәй балалар баҡ саһы эшләп килә.

Ырғыҙ лы мәктәбенең Ғәҙ елгәрәй филиалында 65 балаға 11 шул иҫ әптән 4 юғары, 7 беренсе категориялы уҡ ытыусы белем бирә.Уҡ ыу буйынса өлгәш 100%, сифаты 66,5% тәшкил итә. Уҡ ыу торошон олимпиада, имтихандар, төрлө конкурстар билдәләй. 2016 уҡ ыу йылында 7 уҡ ыусы 9 сыныфты тамамланы һәм ҡ улдарына өлгөргәнлек аттестатын алдылар. Мостафина Р. Тик бишлегә генә тамамланы, Сәғитов С, Йомағужина Н.- дүрт

һәм биш билдәләренә тамамланылар. Мәктәп буйынса Муллағолова Айгүзәл башҡ орт теле һәм рус әҙ әбиәтенән (уҡ ытыусылары Мостафина Ф.С, Сәғитова Ф.М.), Мостафина Р. рус әҙ әбиәтенән Республика олимпиадаһында ҡ атнашып яҡ шы һөҙ өмтәләр күрһәтте. Билалова Диана физкультуранан (уҡ ытыусыһы Билалова Р.Р.) призер.

МАН конкурсында Ишмөхәмәтов И. – 2 урын (уҡ ытыусыһы Ишморатова Ф.Й.), Хакимов Р. – номинацияла еңеүсе (Айбатова Л.Ғ.), Маликова Д. – призер (уҡ ытыусыһы Билалова Н.У.), Сәғитова Я. – призер (уҡ ытыусыһы Сәғитова Г.Ә.).

Яҙ ғы тамсылар конкурсында “Сулпылар” ансамбле , Хакимов Р., Нурғалина Л. – 1 урын алдылар һәм зона ярышында ҡ атнашалар, Ишморатова Ф. менән “Шүлгән” ансамбле 3 урын алдылар.(Етәксеһе- Ишмөхәмәтова И.Н.)

Төрлө темаға бағышланған һүрәттәр конкурсында балалар актив ҡ атнашты: Галина Р., Фәйзуллина Г., Юлсурина Л., Билалова Д., Манапов Р., Муллағолова А., Сәғитова Ш., Сәғитова Н., Сирбаев Ю I-II-III урындар алдылар.

Мәктәп яны участкаһы быйылғы уҡ ыу йылында - III урын алды, етәксеһе Айбатова Л.Ғ.

Иншалар конкурсында “Минең яратҡ ан уҡ ытыусым” Юлсурина Ю. - III урын (уҡ ытыусыһы Мырҙ ағолова Г.Ф.), Манапов Р. III урын (уҡ ытыусыһы Мостафина Ф.С.), “Балалар донъяһы” Сирбаев Ю. III урын, Юлсурина Ю. – III урын (уҡ ытыусыһы Мырҙ ағолова Г.Ф.)

Мостай уҡ ыуҙ арында Манапов Р., Ишмөхәмәтова Н.- III урын (уҡ ытыусыһы Сәғитова Ф.М.).

Классиктарҙ ың әҫ әрҙ әрен яттан һөйләү конкурсында Ишмөхәмәтов И. 1 урын, Ишмөхәмәтова Н. – номинация (уҡ ытыусыһы Сәғитова Ә.Г.). йылда үткәрелеп килгән “Урал батыр” эпосын яттан һөйләү буйынса Сәғитова Я. – III урын алды. “Сулпылар” телевизион конкурсында Нурғалина Л. икенсе турҙ а ҡ атнашты.

“Тыуған ил буйлап” конкурсында Хакимов Р. беренсе урын алды.

Балалар яҙ ыусыһы Агния Бартоның юбилейына арналған конкурсында Сәғитова Я., Сирбаев Ю. – икенсе урын (уҡ ытыусыһы Мырҙ ағолова Г.Ф), Ишмөхәмәтова Н. – III урын (уҡ ытыусыһы Сәғитова Ә.Ғ.)

Бөйөк Ватан һуғышы балалар күҙ легенән конкурсында Ишмөхәмәтова Ә. – беренсе, Билалова З. (уҡ ытыусыһы Ишмөхәмәтова И.Н.).

“Ҡ отҡ арыусылар көнө” тигән конкурста Билалова З.,Фәйзуллина М, Хафизов К., Сәғитова Н., Ғәлимйәнова А.БР МЧС – тың сертификаттары тапшырылды – Сафина Ә.С. етәкселегендә актив ҡ атнаштылар.

Мәктәп баҡ саһынан йыл буйына етәрлек йәшелсә-емеш әҙ ерләп алабыҙ , ә артҡ анын ауыл халҡ ына һатыуға сығарабыҙ . Көҙ гө йәрминкәлә уҡ ыусылар һәм уҡ ытыусылар актив ҡ атнаштылар. Эшләп алынған аҡ са 8300 һум (һигеҙ мең өс йөҙ) яңы йыл байрамын үткәреү өсөн тотонолдо.

Мәктәптә уҡ ыу ғына түгел тәрбиәүи эштәргә лә иғтибар бүленә.

Балалар һаулығын һаҡлау һәм эшкә өйрәтеү маҡсатында июнь айында 21 көнлөк мәктәп яны лагеры ойоштороло. Бында балалар ҙур теләк менән йөрөйҙәр. Йәшелсә –емеш үҫтереү менән бер рәттән төрлө уйындар, ярыштар, конкурстар үткәрелә. Йыл әйләнәһенә балаларға витаминлы ризыҡтар ашатыуға ҙур иғтибар бүленә.

Мәктәп проблемалары ла юҡ түгел. Әлеге мәлдә компьютерҙар иҫке, интернет селтәренә сығыу ҙур проблема булып тора. Бөтөн көсөнә эшләп торған компьютерҙар юҡ кимәлдә, интернет тиҙлеге бик яй. Электр селтәре торошо бик иҫкерҙе, шуның арҡаһында компьютерҙар, электр приборҙары боҙола, проводтар янып китеү осраҡтары ла булды. Спортзалда , класс бүлмәләрендә яҡтылыҡ етерлек кимәлдә түгел. Электр селтәренә капиталь ремонт талап ителә, мәктәпте асҡандан алып,ун алты йыл электр үткәргестәренә бер тапҡыр ҙа ремонт үткәрелмәне. Йыл һайын ремонт эштәре ата- әсәләр ярҙамы менән башҡарыла.

Ғәҙелгәрәй балалар баҡсаһы 2015 йылдың сентябрь айынан Ырғыҙлы урта мәктәбенең Ғәҙелгәрәй филиалына ҡараған мәктәпкәсә төркөм итеп үҙгәртелде.Төркөмдә 20 бала йөрөй, шуларҙың 8 әҙерлек төркөмөндә шөғөлләнә. Раскраска буяу буйынса интернет конкурста ҡатнашып балалар һәм тәрбиәселәр грамота һәм сертификаттар менән бүләкләнделәр.Район конкурсында Сәғитова Шәүрә ”Йәш һандуғас”номинацияһында еңеү яулаһа, Билалов Айназ лауреат булды. “Урал батыр” конкурсында Шәүрә тағы ла 3 урын яуланы.

Бинаның һыуыҡ булыуы төп Проблема булып тора. Шул сәбәпле ноябрь , декабрь, ғинуар айында балаларҙың йөрөүе (посещаемость) насар булды.

2015-2016 йылында **Кейекбай башланғыс мәктәп - балалар баҡсаһы** башланғыс мәктәптә 24 бала белем алды. 9 уҡыусы дүртенсе синыфты тамамлап, Иҫке Собханғол урта мәктәбенә уҡырға барҙы. Өлгәш -100%, Сифат- 59%. Балалар баҡсаһында 20 бала иҫәптә тороп, 16 бала даими йөрөнө. Был 80% тәшкил итә. Уларҙың араһынан ауырыу сәбәпле, ата-әсәләрҙең ялда булыуы сәбәпле йөрөмәгәндәр бар. Коллектив үҙ эшен яратҡан ижади фекер йөрөткән хеҙмәт һөйгән кадрҙар менән тәьмин ителгән. Бөтә педагогтар ҙа махсус белем алғандар.

Уҡытыусылар һаны -3

Тәрбиәселәр – 2.

Тәрбиә һәм белем биреү ата-әсәләр, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре менән бәйләнештә алып барыла.

Балалар муниципаль күләмдә үткән конкурстарҙа ла әүҙем ҡатнаштылар һәм призлы урындар яуланылар:“Яҙғы тамсылар” конкурсында “Тамсыҡай” вокаль ансамбле 1 урын, эстрада йырҙарын башҡарыусылар араһында Сафина Диниә шулай уҡ 1 урын алыуға өлгәштеләр. 3 синыфтың малайҙары ла шулай уҡ ошо конкурста үҙҙәренең көстәрен һынап ҡаранылар. Бәләкәй фәндәр академияһы сиктәрендә үткәрелгән фәнни-

тикшеренеү эше буйынса үткәрелгән конкурсҡа Сафина Диниәнең, Алтыншина Айгүзәлдең, Туҡбаева Илсиәнең эштәре ебәрелде. Туҡбаева Илсиәнең эше район турына үтте. Балалар ижады үҙәге тарафынан ойоштороған фотоконкурста ла 2-3 синыфтан Бәхтийәр, Илсиә, Айгүзәл, Айсыуаҡ ихлас ҡатнаштылар һәм Алтыншина Айгүзәл 3 урын алып Маҡтау ҡағыҙы һәм иҫтәлекле бүләккә өлгәште, ә Сафин Бәхтийәргә әүҙем ҡатнашҡан өсөн Маҡтау гамотаһы бирелде. Әсәләр көнө уңайынан ғаиләгә һәм балаларға социаль ярҙам күрһәтеү бүлеге үткәргән "Берҙән-берем - әсәйем" исемле инша конкурсында Алтыншина Айгүзәл 1 урын алыуға өлгәште. Өлгәшелгән уңыштары һөҙөмтәһендә ул район хакимиәте үткәргән шыршы байрамында ҡатнашты.

Ата –әсәләр мәктәп тормошоноң айырылғыһыҙ өпөшө. Ата-әсәләр комитеты ағзалары Туҡбаева Тәнзилә, Аминова Әминә планлы эш алып барҙы. Балаларҙың ашауын ойошторуға ҙур ярҙам күрһәттеләр. Йыл дауамында педагогик сараларҙа: байрамдарҙа, күңел асыуҙарҙа, спорт байрамдарында әүҙем ҡатнаштылар.Мәктәпте яңы уҡыу йылына әҙерләүҙәләр ихлас ҡатнаштылар.

Балаларҙы тәрбиәләүҙә мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең эштәре баһалап бөткөһөҙ .

Балаларҙың һаулығына ла иғтибар ҙур. Район үҙәге больницаһы хеҙмәткәрҙәре 3 тапҡыр килеп балаларҙың һаулығын тикшереп киттеләр. Тикшереүҙәр шуны күрһәтә - балаларҙың һаулығына айырым иғтибар кәрәк: насарештәр, анемия, телмәр тотҡарлығы күҙәтелә.

Мәктәп яны баҡсаһы ла уңышлы эшләп килә. 2015-2016 уҡыу йылында мәктәп яны баҡсаһын Зөлфиә Нуритдин ҡыҙы етәкләне. Мәктәп ашханаһына етәрлек кимәлдә емеш-еләк,йәшелсә әҙерләнде.

Мәктәп коллективы ауыл күләмендә үткәрелгән сараларҙан ситтә ҡалмай.

Материаль- техник база буйынса мәктәп биналары физик яҡтан иҫкергән. Балалар баҡсаһы СанПин талаптарына тура килмәй. 3 мейесте алыштырырға кәрәк. Дөйөмләштереп әйткәндә, капитал ремонт кәрәк.

МӘНДӘҒОЛ АУЫЛЫ БАШЛАНҒЫС БЕЛЕМ БИРЕҮ МӘКТӘБЕН

2016 йылда 4-се класты 4 уҡыусы тамамлаһа, 1-се синыфҡа уҡырға килеүселәр булманы. Сентябрҙә уҡыу йылын 7 уҡыусы башланы. 1 бала мәктәпкәсә әҙерлек төркөмөнә йөрөй. 2016 йылды 4 уҡыусы «4» , «5» билдәләренә тамамланы. Мәктәптә атайҙар көнө, әсәйҙәр байрамы, Еңеү көнө, һуңғы ҡыңғырау, Белем көнө, ололар көнө, уңыш байрамы, Әсә көнө, БР көнө, Яңы йыл байрамдары уңышлы үткәрелде. Әсә көнөнә арналған район күләмендәге иншалар конкурсында Иманғолов Вилдан 3-сө урын, Миңлеғолов Илнар актив ҡатнашҡаны өсөн грамота һәм бүләктәр алдылар. Декабрь айында яҡшы уҡығаны өсөн Иманғолов Вилдан муниципаль Шыршы байрамында ҡатнашты. Яңы йыл байрамдары уңайынан ойоштороған ҡарһындары конкурсында мәктәп 1-се урынға лайыҡ булды.

Ауылда урынлашҡ ан турбазаға тюбингта шыуырға, район үҙ әгенә катокка барҙ ыҡ .
Юл, пожар,шәхси хәүефһеҙ лек ҡ ағиҙ әләре буйынса класс сәғәттәре, инструктаждар даими үткәрелде. КДН-да иҫ әптә тороусы балалар юҡ . Ата-әсәләр мәктәп тормошо менән ҡ ыҙ ыҡ һыналар, ярҙ ам итәләр.
Йәмғиәт эштәрендә ҡ атнашыу. Яҙ һәм көҙ айҙ арында Тимурсылар командаһы эшләп килә. Обелиск янын ҡ ыйҙ ан таҙ артыу, экологик субботниктарҙ а ҡ атнашыу әүҙ ем барҙ ы. Клуб хеҙ мәткәрҙ әре менән берлектә Интернационалистар көнөн, Ололар көнөн һәм Инвалидтар көнөн билдәләнек - концертта ҡ атнаштыҡ , ҡ отлау открыткалары тапшырҙ ыҡ .
Материаль-техник база.**Мәндәғол башланғыс мәктәбе зданиеһы 1991 йылда төҙ өлгән. Спорт залы, ашхана юҡ , кластарҙ ың размеры һәм торошо санитар-гигиена талаптарына тура килмәй. Утынлыҡ сафтан сыҡ ҡ ан, түбәһе серегән. Бәҙ рәф түбәһенә тимер япма кәрәк. Мәктәп бинаһының нигеҙ е капиталь ремонт талап итә. Мейес аҫ ты бүрәнәләрен, иҙ әнде алыштырырға кәрәк**.
2016 йылда Берҙ әм Рәсәй партияһының «Реаль эштәр» проекты нигеҙ ендә мәктәпкә евротәҙ рәләр һәм бүлмә ишектәре урынлаштырылды. Урам яҡ баҡ са яңыртылды. Мәктәп эсендә косметик ремонт эшләнде.

ҺАУЛЫҠ ҺАҠ ЛАУ.

Кейекбай ауыл биләмәһендә 3 фельдшер-акушерлыҡ пункты эшләп килә.
Кейекбай фельдшер-акушер пункты йылына 2375 кешене амбулатор ҡ абул иткән, шуларҙ ың 1450 ололар, 880 балалар. Өйҙ әргә йөрөү 432. Уртаса көнөнә 7 кеше тура килә. 6 тарҡ ыр район үҙ әгенән врачтар килеп прием үткәрҙ е. 13 куб.м. утын әҙ ерләнгән. Проблема булып медпунктты йылытыу тора.(түбә, ишекте)

Мәндәғол фельдшерының амбулатор ҡ абул итеүе 1560, шуның 1035 ололар, 525 балалар. Өйҙ әргә йөрөү 355. Уртаса көнөнә 7.2 кеше тура килә

Ғәҙ елгәрәй фельдшерының амбулатор ҡ абул итеүе – 2440, шуның 1371 ололар, 1069 балалар. Өйҙ әргә йөрөү 416. Уртаса халыҡ ты ҡ абул итеү көнөнә 9.
Халыҡ ты социаль яҡ лау бүлегендә ауыл биләмәһенән 3 кеше эшләп килә. Бер социаль медсестра. Ул 2016 йылда 16 кешене ҡ араны. Кейекбайҙ ың социаль хеҙ мәткәре 9, Ғәҙ елгәрәй кешене хеҙ мәтләндерҙ е.

МӘҘ ӘНИӘТ йорттары ауыл хакимиәте, ҡ атын-ҡ ыҙ ҙ ар советы, мәктәп, йәштәр бүлеге менән тығыҙ бәйләнештә эшләйҙ әр.

Кейекбай ауыл мәҙ әниәт йорто хеҙ мәткәпҙ әре тарафынан 358 сара үтеп, шул сараларға 9537 кеше ҡ атнашҡ ан. Мәҙ әниәт йорто мәктәп, катын-кыззар ойошмаһы, Ағинәйҙ әр һәм Мосолмандар клубы ағзалары менән тығыҙ бәйләнештә эшләне.

Мәндәғол ауыл клубы менән берлектә “Көлә-көлә көлкө көнө килә“ исемле КВН, Зыр әйләнә орсоғом исемле ял кисәһе, Ыуыҙ ҡ оймаҡ байрамы”,

“Бөгөн беҙ ҙ ә аулаҡ өй” ял кисәһе, “Ҡышты оҙ атыу байрамы h.б.саралар үтте.

Ҡатын-ҡыҙ ҙ ар менән “Аулаҡ өй уйындары”, “Һаулыҡ көнө”, ”Йәшлек илендә ҡ алам ”исемле ял кисәһе, йола байрамдар үтте.

Мәктәп менән берлектә эш бик әүҙ ем барҙ ы. Патриотик тәрбиә, спорт уйындары, тематик ял кисәләре, ҡ ыҙ ыл даталар, тематик дискотекалар, викториналар,урам ярыштары уҙ ҙ ы.

Район күләмендә үткән сараларҙ а ҡ атнашыу : “Яраткан мультфилмдарҙ ан йырҙ ар” бәйгеһе (Тукбаева Гөлсиә –дәртләндереү бүләге), ”Яҙ гүзәле” (Рыскулова Альбина-Өмөт номинацияһы), “Яҙ ғы тамсылар” (Ләйсән балалар йыр ансамбле - 1-се урын, Диниә Сафина - 1 урын), “ Йәш йырсылар “ район бәйгеһе (Ибрагимова Лилиә – дәртләндереү бүләге), ” Һай Бөрйән егеттәре” район бәйгеһе (3-сө урын), ”Яңғыраһын гармун моңдары ” район бәйгеһе (Сафин Ғәфүр – халыҡ көйҙ әрен оҫ та башҡ арыусы), ҡ обайыр Һәм мөнәжәт ятлау бәйгеһе (Сөләймәнова Гөлдәр – дәрләндереү бүдәгенә), район таҡ маҡ сылар бәйгеһе (Ибрагимова Лилиә– дәртләндереү), Район конкурс-выставка “Милләтебеҙ рухы биҙ әктә”, (Рыскулова Фәнилә-2 урын, Рыскулова Динә – дәрләндереү, Рыскулова Альбина - дәрләндереү) ,“Бал байрамы”,һабантуй, Йәрминкә.

”Ҡ арға бутҡ аһы” , ” Ҡ уҙ ғалаҡ ”, ”, ”Ҡ ышты оҙ атыу” байрамдары, Округтар концерты, Спорт майҙ ансығын асыу, “Байрамығыҙ менән ир-егеттәр” исемле ял кисәләре, “Беҙ бер ағас япраҡ тары, барыбыҙ ҙ а тамырҙ аштар “исемле шәжәрә байрамы (Хәлитов Ғаффар Абдулла улының шәжәрәһе), “Ҡ артаймаһын күңелдәр” исемле 80 йәшлек юбилярҙ арҙ ы тәбрикләү кисәһе ҙ ур ауыл байрамдары булып уҙ ҙ ы.

“Күстәнәсем итеп йыр килтерҙ ем” исемле концерт программаһы менән- Яңы Мөсәт, Яуымбай, Мәһәҙ ей,Брәтәк, Исламбай ауылдарында сығыш яһанылар.

Түләүле сараларҙ ан ,аренда, спонсорлык ярҙ амдарынан 19170 һум аҡ са йыйылды һәм саралар үткәреү өсөн тотонолдо. Үткән сараларға (Әүбәкир һәм Хәлиҙ ә Сәйфитдиновтар бағымсылыҡ ярҙ амы күрһәтте.Уларға ҙ ур рәхмәттебеҙ ҙ е белдерәбеҙ .

Хужалыҡ эштәренән - 50 м3 утын әзерләнде.

Проблема булып мәҙ әниәт йортоноң баш ябыуын алыштырыу,мейесте ремонтлау һәм мәҙ әниәт йорто алдындағы баҡ са ҡ оймаларын (штакетниктар) яңыртып эшләү тора.

Ғәҙ елгәрәй мәҙ әниәт йортонда төрлө саралар үтеп тора. Ял көнөнән тыш, эш ваҡ ыттарында йорт асыҡ , халыҡ ял итеү маҡ сатында йөрөй, мәҙ әни сараларҙ а ҡ атнаша. Көн һайын ойошторолған сара булып – ир-егеттәр өсөн биллъярд, шахмат. Хореография түңәрәгендә уҡ ыусы балалар, урта йәштәге бер нисә кеше шөғөлләнә. Вокал түңәрәге “ Һомай”ҙ а 9 кеше, “Йәнбикә”лә 7 кеше . Репертуарҙ а халыҡ , төрлө эстрада, хәрби йырҙ ар. Театраль түңәрәк тә йыл әйләнәһенә эшләп килде. Үткән түңәрәктәр аша яңы таланттар асыла.

Инструменталь башҡарыусылар район үҙәгендә уҙған сараларҙа ҡатнашты: Файзуллин Марсель ҡурай байрамында Гран- при алды, Тимербаев Хәмит “моңло баян” конкурсында беренсе урын яуланы.

Йыл аҙағында “Ағинәйҙәр” клубы сафҡа инде, уны Юлсурина Сәғирә апай мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре менән берлектә башлап ебәрҙе, әлеге көндәлә улар әүҙем генә эшләп киләләр, бөгөнгө көндә Байегетова Мәрйәмбикә апай етәкләй. Ҙур ғына “ Ағинәйҙәр” ҡоро үтте ноябрь айында, Ғәлиәкбәр, Ҡыпсаҡ , Киекбай, Ҡотандан ағинәйҙәр саҡырылды. Уларҙың фәһемле сығыштарын ауыл халҡы ҡараны, район гәзит биттәрендә сыҡты. Күптән онотолған йола “Ҡаҙ өмәһе” уңышлы үтте. Бөгөнгө көндә йома сәйҙәренә йөрөйҙәр, ҡорамалар йыйылышып эшләйҙәр, мәҙәни сараларҙа ла актив ҡатнашалар.

Массалы мероприятиелар ойоштороу, беҙҙең бурыс. Улар халыҡ ҡаоҡшай, ҙур теләк менән йөрөйҙәр. Йәше – ҡарты бер булып, тамаша залын тултыралар. Бигерәк тә, мин әйтеп китер инем, ауыл һәуәҫ кәрҙәре менән ҡуйылған тамашаларға халыҡ бик теләп килә. Шулай - уҡ , сит ауылдан килтерелгән концерттарҙы ауыл халҡы ярата. Шуға күрә, район эсендәге ауылдар менән тығыҙ бәйләнештәбеҙ , алдан хәбәр итеп, гастроль концерттар менән барып ҡайтабыҙ . Йә булмаһа , үҙебеҙ һорап саҡырабыҙ . Ауылдар араһында матур тәртип бар, урындағы культура хеҙмәткәрҙәре, бар ысулдар ҡулланып, тамашасыларҙы зал тултырып йыя, һәм “яуап концерт”ы итеп, бик оҙаҡ ҡаҡа һуҙмайса, шул ауыл һәүәҫ кәрҙәре менән ҡаршы килеп сығыш яһайҙар.

Йыл барышында мәҙәниәт йортонда 262 массалы тамашалар уҙған. 70-э йорттан тыш үткән саралар. Дөйөм алғанда, мәҙәниәт йортонан тыш үткән мероприятиелар менән бергә 332- не тәшкил итә. Шуларҙың 50- һе *14 йәшкә тиклемге* балаларға, миҫал өсөн, иң сағыу сығыштырҙың бер икәүен әйтер инем: “хәрәкәттә бәрәкәт” һәм байрамдарҙағы “флеш-моб”. 71- е *үҫмерҙәр һәм йәштәр өсөн*, викториналар, КВН- дар, дискотекалар.. 87- һе *25-30 йәштәгеләр өсөн*, “дисконочь”, ял кисәләре, конкурстар.. 97- һе *31-49 йәштәгеләр өсөн* билльярд, “осрашайыҡ әле бөгөн кис,” “диско 80-90” уҙғарылһа, 27 мероприятие *өлкән йәштәгеләргә* ойошторола: “Ҡаҙ өмәһе”, “ Бер осрашыу уҙе бер ғүмер”кисәһе, “Ағинәйҙәр” йыйылышы.

Балалар һәм үҫмерҙәр менән саралар. Мәҙәниәт йорто мәктәп менән килешеп берлектә эшләй башланы, балаларға үткән сараларҙа бик активтар, уҡытыусылар мәҙәни сараларҙа ҡатнашалар, төрлө яҡтан ярҙам күрһәтәләр. Уҡыусы балалар һәм үҫмерҙәр өсөн түңәрәктәр бар, ял кисәләре , уйындар, викторина, конкурстар ойошторолоп тора.

Йәштәр ялын ойоштороу. Йәштәр ауылға ҡайтҡанын файҙаланып, төрлө саралар үтте. КВН, Викториналар, крассвордтар, төрлө тематик кисәләр улар өсөн ойошторолдо, һәм әлбиттә дискотека. Йәштәр бүлеге хеҙмәткәре Рыҫҡолова Рәүиләнең үткән сараларҙа әһәмиәте ҙур.

Өлкән йәштәгеләрҙең ялы. Өлкән йәштәгеләр ҙә сараларҙан ситтә ҡалмай. Уларҙы культура йәмғиәтенә йәлип итәбеҙ . Шул маҡсаттан

ойоштороолған саралар булып: “ Ураҙ а” байрамы, Өлкәндәр көнөн ойоштороу, “Ҡ орбан байрам.”

Ауыл халҡ ы менән эскелек, норкамания, тәмәке тартыу, СПИД ҡ а ҡ аршы профилактик саралар. Ошо темаларға төрлө йәштәгеләр менән һөйләшеүҙ әр, викториналар, уйындар утеп торҙ о.Профилактика өсөн сценкалар ҡ уйылды. “ Наркомания ниңә кәрәк һуң?” стенд эшләнде.

Патриотик яҡ тан тәрбиә. Әрме сафтарына киткән йәш егеттәргә вечерҙ арын мәҙ әниәт йортонда билдәләү, дискотекалар ойоштороу, уйындар.

Кино йылы. Барлыҡ саралар ҙ а уткән йыл тематикаһына бәйле булды тиерлек. Үткән мероприятиеларҙ а ғәиләләр, балалар, өлкәндәр ҡ атнашты.

Спонсорҙ арҙ ан ярҙ ам. Спонсорҙ арбыҙ булып тора, уларһыҙ , бер сара ла үтмәй тиерлек. Яңы йыл балмаскарадтарында ла, башҡ а байрамдарҙ а ла йыл һайын иң ихлас, иң йомарт спонсорыбыҙ ул шәхси эшҡ ыуар Иҫ әнғужина Миңнурый апай, Сагитов Садиҡ Сабитович та ситтә тороп ҡ алмай. Һәм ҡ айһы бер сараларҙ а Сагитова Гөлиә, Рәйсә апайҙ ан да спонсорлыҡ ярҙ амдарына өлгәшәбеҙ . Яңы йыл алдынан ауыл старостаһы Ишморатов Сәлим Әбҡ әдир улы ярҙ ам итеп ебәрҙ е, уға төрлө ваҡ кәрәк яраҡ тар алынды, ҡ ул ярҙ амдарын да электрик булараҡ күрһәтеп тора, шулай уҡ , Сәғитова Гүзәл апай ҙ а сәхнә өсөн ҡ орғандарын тапшырҙ ы.

Проблемалар Здание авария торошонда, 2017 йылда капиталь ремонт кәрәк, яҙ ын- йәйен тамашысылар ултырған тапҡ ырҙ ан түбәнән һыу тама, ошо-уҡ залда иҙ ән түбәнәйеп, уртанан аҫ ҡ а эйелгән, тыш яғынан стена ярылған һәм здание тотош урталай бүленеп төшөүе ихтимал. Ватыҡ тәҙ рәләр бихисап, тышҡ ы ишекте лә алыштырыу мотлаҡ . Аппаратуралар ватыҡ , колонкалар эшләмәй. Балалар өсөн кинотеатр менән генә саралар үтә, микрофондар ҙ а хатта сафта түгел.

Ғәҙ елгәрәй ауыл китапханаһы 2 ауылды хеҙ мәтләндерә: Ғәҙ елгәрәй һәм Кейекбай ауылдарын. Китапхана балаларға һәм өлкәндәргә төрлө кисәләр, байрам саралары, уйын-викториналар үткәреп тора. Шулай уҡ район үҙ әк китапханаһы тарафынан үткәрелгән конкурстарҙ а ҡ атнашты. “Библиотөн” Бөтә Рәсәй акцияһына ҡ ушылып, балалар һәм өлкәндәр өсөн саралар үтте. Балалар һәм үҫ мерҙ әр китабы аҙ налығы, “Беҙ сәләмәт тормош яҡ лы” акциялары ла шаулап-гөрләп үтеп китте. Кейекбай ауылында ла әүҙ ем китап уҡ ыусылар күп. Ай һайын китаптар алып барып, балалар һәм өлкәндәр өсөн саралар үткәреп торола.

Мәндәғол ауыл клубы үҙ планына ярашлы эшләй. Һәр ҡ ыҙ ыл дата билдәләп барыла. Ололар көнө, Ураҙ а, Ҡ орбан байрамдары, мөмкинлектәре сикләнгәндәр (инвалидтар) көнө яҡ шы ойоштороолдо. Сәскәләр байрамында Галеева Сабира апай 1-се, Иманғолова Фәғилә 2-се, Иманғолова Нәғимә инәйгә 3-сө урын бирелде. 26 ноябрь Әсәйҙ әр көнө үткәрелде, был сарала йәш әсәйҙ әр ҡ атнашты. **Проблема булып баҡ са ҡ оймаларын яңыртыу,электр үткәргестәренә ремонт тора.**

Һәр ауылда йәмәғәт ойошмалары: ҡатын-ҡыҙҙар һәм ветерандар советтары эшләп килә. Улар менән берлектә төрлө социаль һорауҙарҙы һәм проблемаларҙы хәл итәбеҙ. Ауыл биләмәһендә һәм район кимәлендә үткәрелгән сараларҙа әүҙем ҡатнашалар. Кейекбайҙа ветерандар советын Габитова Асия апай, Ғәҙелгәрәйҙә Юмагужин Рафиҡ ағай етәкләй. Айырыуса Еңеү байрамы, ололар көнө, мөмкинлектәре сикләнгәндәр (инвалидтар) көнө, йәрминкәләр, экологик өмәләр, йома сәйҙәре, төрлө йолалар, Ураҙа, Ҡорбан байрамдары улар тарафынан бик яҡшы кимәлдә ойошторолдо, Ғәҙелгәрәй һәм Кейекбай ауылдарында ветерандарҙың 80 йәшлек юбилейҙары ҙур ойошҡанлыҡ менән үтте.

Шулай уҡ Ғәҙелгәрәй, Кейекбай һәм Мәндәғол ауылдарында дини ойошмалар, мәхәлләләр уңышлы эшләйҙәр. Депутаттар Юмагужин Г.Г.,Сагитов С.С.,Юлмухаметов Я.Г. инициативаһы, ауыл хакимиәте һәм ауыл халҡы ярҙамы менән Ғәҙелгәрәй ауылы мәсетенең ҡоймаһы тимерҙән яңыртып эшләнде, Кейекбай ауылы мәсетенә ремонт эштәре башҡарылды, Мәндәғол ауылы мәсете буралып, нигеҙеҡ ойолдо.

Кейекбай ауылында ҡатын-ҡыҙҙар ойошмаһының составы 2016 йылда яңыртылып ихлас ҡына эш башланылар. Аҙнаның шаршамбы көнөндә кис ултырыуҙар үтте. Дарман исемле кисә, Ыуыҙ ҡоймағы исемле йола, “йәшлек илендә ҡалам” исемле сарала район ҡунаҡтарыла ҡатнашып тәжрибә уртаҡлаштылар. Законһыҙ спиртлы эсемлектәр һатыуға, эскелеккә ҡаршы эштәр яҡшы алып барылды. Халыҡтан телдән шулай яҙма ғаризалар ҡабул ителде. Был юҫыҡта 12 эш ҡаралған. 5 ғаиләгә рейд менән барғандар. “Тирә яғым гөл-сәскә” исемле сара үтеп еңеүселәр билдәләнде. Ҡатын-ҡыҙҙар ауылда үткәрелгән өмәләрҙә ихлас ҡатнаштылар. (Мәсетте рәтләү, зыяратты буяуҙа) Ауыл биләмәһендә уҙғарылған “Ауыл уртаҡ йортобоҙ” конкурсында актив ҡатнаштылар.

Ғәҙелгәрәй ауылы ҡатын-ҡыҙҙар советыла йыл башында план төҙөп алып шул планға ярашлы эш алып барҙы. Ауыл биләмәһенең өс ауылының ҡатын-ҡыҙҙар ойошмаһы берлектә “Дарман” уйыны үткәрелде. Март айында район ҡатын-ҡыҙҙар Советы председателе Рәмилә Фәхретдин ҡыҙы ҡатнашлығында осрашыу үтте. Июнь айында 50-80 йәшкә тиклемгеләрҙең юбилей кисәһе бик матур үткәрелде. Һәр үткәрелгән сарала ҡатын-ҡыҙҙар советы ихлас ҡатнаша.

Кейекбай ауыл биләмәһендә иң ҙур ойошмаларҙың береһе Шүлгән-Таш ҡурсаулығы эшләп килә. Урындағы үҙ-идара вәкәләттәренең ҡайһы берҙәрен ҡурсаулыҡ ярҙамы менән хәл итәбеҙ. Мәҫәлән пожар хәүефһеҙлеге буйынса килешеү нигеҙендә эш алып барыла, урамдарҙы, ҡыйтүгеү урындарын таҙартыу улар ярҙамында башҡарыла. Шулай уҡ биләмәлә үткәрелгән һәр төрлө сараларҙа ҡурсаулыҡ спонсорлыҡ ярҙамы күрһәтә.

ЙӘШТӘР ТОРМОШО.

Йәштәр менән эшләүсе белгес үҙ планына ярашлы эшләп килә. Ауыл биләмәһендә, район күләмендә үткәрелгән сараларҙа актив ҡатнашын

призлы урындар яулай йәштәр. Мәҫ әлән: февраль айында район күләмендә уткән “Бөрйән батыры”нда Ишмуратов Нәҙ ир номинация, “Йыл килене” Ырыҫ ҡ олова Рәүилә 2 урын, “Атай, әсәй һәм мин спорт һөйөүсе ғаилә” Юлсурин Динарҙ ың ғаиләһе 2 урындар яуланылар. Йәштәргә, уҡ ыусы баларға ауыл фельдшеры менән берлектә “Беҙ сәләмәт тормош яҡ лы”, “Экстремизм һәм терроризмға ҡ аршы”, “Насар ғәҙ әттәр һәм дин” (ауыл муллаһы Әхмәтйәнов Фәрит бабай менән), “Сәскәләй матур сағың, тәмәке ниңә тағын” кеүек темаларға лекциялар уҡ ылды, акциялар үтте.

Шулай уҡ йәштәр төрлө спорт ярыштарында ла актив ҡ атнашалар. Билъярд, волейбол һәм футбол буйынса ауыл хакимиәтенең күсмә кубогына ярыштар даими үткәрелеп тора. Беҙ ҙ ең йәштәр Билъярд буйынса район күләмендә, ауыл биләмәһендә үткәрелгән ярыштарҙ а тик призлы урындар ғына яулайҙ ар. Мәҫ әлән: билъярд буйынса Кейекбай ауылы командаһы өс йыл рәттән 1 урын алды һәм район хакимиәте кубогы беҙ ҙ ә, волейбол ярыштарында Ғәҙ елгәрәй ауылы егеттәре һынатмай. Ғәлиәкбәр ауылында 3, Иҫ ке Монасипта 3, Яңы Мөсәттә 2 урын яуланылар.

Быйылғы йылда Экология һәм айырыуса һаҡ ланған тәбиғәт биләмәләре йылы сиктәрендә мөһим саралар үткәреү ҡ аралған. Бөтәгеҙ ҙ е лә был эштәрҙ ә әүҙ ем булырға саҡ ырам.

Хөрмәтле ауылдаштар!

Һеҙ ҙ ең барығыҙ ға ла иҫ әнлек, һаулыҡ һәм ғаилә бәхете теләйем. Иғтибарығыҙ өсөн ҙ ур рәхмәт.